# Башкортостан - илгенэм



Урал...
Был исемде әйтеү менән, күҙ алдына әкиәт батшаһының алтын һарайына оҡшаған бейек ҡаялар,



иге-сиге булмаған урмандар,



таштан-ташҡа һикереп аҡҡан

һалҡын шишмәләр,



таçма-таçма булып һуҙылған тау юлдары килеп баçа.



Урал...Унан көс алып, урау-урау юлдар үтеп, беҙҙең данлыҡлы Ағиҙелебеҙ, етеҙ Ҡариҙелебеҙ киң далаларға ашыға.

 

Уралдың йөрәгенә күҙ һалайыҡ.
Ниндәй генә хазиналар юҡ унда.Алтын
һәм баҡыр,тимер һәм аҫыл таштар,





нефть һәм күмер...



Шуларҙың бөтәһе лә беҙҙең
Башҡортостаныбыҙ бит.

Мостай Кәрим



# Башкортостан - Урал ере



# Башкортостан - кумыз теле



# Башкортостан - кымыҙ сере




Башҡортостан – Бөйөк Ватаныбыҙ-ҙың бәләкәй генә бер өлөшө.Уның территорияһы 143,6 мең км/2. Республикабыҙҙа 54 район, 21 ҡала, 4674 ауыл һәм ҡа-саба бар.



Республикабыҙҙың халҡы 4 миллиондан ашыу.100-ҙән ашыу халыҡ дуҫ һәм татыу йәшәй.



Башҡортостанда 2000-дән ашыу күл бар. Иң ҙур күле – Асылыкүл.Тағы ла Ҡандра-күл, Яҡтыкүл, Аҡкүл, Мулдаҡ,Талҡаҫ, Яу-гүл, Сыбаркүл, Яугүл күлдәре кеүек ҙур күлдәр бар.



Йылғаларҙың һаны 13 меңгә яҡын.Иң ҙур йылға-
Ағиҙел.Унын оҙонлоғо – 1420 километр. Ҡариҙел,
Дим, Һаҡмар, Әй, Йүрүҙән, Инйәр, Таналыҡ,
Еҙем, Эйек йылғалары ла ҙур йылғалар.



Иң ҙур тауы – Ямантау.Ул Белорет районының Оло һәм Кесе Инйәр йылғаларының араһында ята.Уның бейеклеге диңгеҙ кимәленән 1640 метрға тиклем етә.





Башҡортостанда 215 төр ҡош оя ҡора, 77 төр хайуан йәшәй.Йәнлектәрҙең 26 төрө «Ҡыҙыл китап»ҡа индерелгән.